# «Шүлгән» эпосының исем туйы

Яҡташыбыҙ, күренекле сәсән, халыҡ ижадын йыйыусы, мәғрифәтсе Мөғәлләм Шәйхаттар улы Мирхәйҙәровтың «Шүлгән» китабын руссаға БР Яҙыусылар һәм журналистар союзы ағзаһы Гөлшат Әхмәтҡужина, ә «Ҡуңыр буға» китабын яҙыусы, драматург Ғәзим Шафиҡов тәржемә иткән. Күптән түгел район китапханаһында ул эпостарҙың исем туйы үткәрелде. Унда Өфөнән БР-ҙың ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһы йәмғиәтенең ветерандар советы рәйесе Азия Ҡусимова, ойошманың рәйес урынбаҫары Илүзә Ғәйнуллина, райондың ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе Линиза Сәғәҙиева, сәсәниәләр Хәнифә Әбүбәкирова, Васила Садыҡова, Мирхәйҙәровтың балалары, туғандары һәм башҡалар ҡатнашты.

«Тыуған илем, һутлы
тупрағыңдың
Бер семтемен түш кеҫәлә —
Йөрәгем эргәһенә һалайым», — тип башлап ебәрҙе сараны алып барыусы Айгөл Тоҡомбәтова. Был шиғыр юлдары мәғрифәтсенең тыуған ерҙә йәшәп тә, күңелендә иленә, еренә бөтмәҫ-төкәнмәҫ һағыныу хисе һаҡлауы сағыла. Бөртөкләп йыйған ижади хазинаның кешеләргә барып етмәү ихтималлығын уйлап, көндәлегендә ул былай ти: «Халҡыбыҙҙың киләсәген тәьмин итеү хәтер ептәре аша тамырыбыҙҙы байҡауҙан ғибәрәт... Ыҙалап тапҡанымды халҡыма тапшырып китергә, хушлашырға иркем бармы был ирекһеҙ демократик илдә?» Был юлдарҙы ул 70 йәшен билдәләгән саҡта яҙған.

Мөғәлләм Шәйхаттар улы менән Гөлшат Әхмәтҡужина студент ваҡыттарынан таныш була. Ул мәғрифәтсе ауыҙынан башҡорт фольклорына, ижадҡа, халҡыбыҙ яҙмышына бәйле мәғлүмәттәр яҙып ала.

— Һиңә халыҡ ижадын яҡшы белгән, үҙе лә шиғырҙар яҙған Мөғәлләм апаңды күрергә кәрәк, — тине бер көн әсәйем. Ул саҡта мин Бейеш батыр тураһында ҡыҙыҡһына инем. Мирхәйҙәровтарға барғанда, мөләйем генә йөҙлө, баҫалҡы Сания инәй ҡаршы алды. Ә Мөғәлләм апа өҫтәл артында нимәләр яҙып ултыра ине. Эшен ҡалдырып, йомошомдо тыңланы. Бик оҙаҡ, көнө буйы тиерлек, һөйләшеп ултырҙыҡ. Сәсән күңелен борсоған мәсьәләләр, башҡорт теленең яҙмышы, кешеләрҙең рухи ҡиммәттәрҙе онота барыуы, тәбиғәттең ҡороуы хаҡында әсенеп бәйән итте. Бейеш батырҙың быҒаса берәүгә лә мәғлүм булмаған мажараларын, тормош сәхифәләрен һөйләгәйне, — тип хәтерләне ул саҡтарҙы Гөлшат Фазылғаян ҡыҙы.



Илүзә Ишмөхәмәт ҡыҙы БР ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһы рәйесе Гөлнур Ҡолһарина исеменән Дамир һәм Марсель Мирхәйҙәровтар ғаиләһенә, Гөлшат Әхмәтҡужинаға, ә Линиза Сәғәҙиева музыкаль сәләм менән сығыш яһаған, мәғрифәтсенең вариҫтары Зилә Батталоваға, Илмира Мирхәйҙәроваға Почет грамоталары тапшырҙы. Байрам ҡунаҡтарына «Шүлгән» эпосы бүләк ителде.

Сарала ҡатнашҡан 1-се Аҫҡар урта мәктәбе уҡыусыһы Зинә Ғәлләмова М. Мирхәйҙәровтың премияһын булдырыу тураһында тәҡдим яһаны. Данфира Харисова күрше булараҡ, бергә уҙған бала саҡ хәтирәләре менән уртаҡлашты. Сарала М. Мирхәйҙәровтың туғандары сығыш яһаны. Район мәҙәниәт һарайы хеҙмәткәрҙәре Вил Йәнийегетовтың матур йырҙары, Азамат Итекәевтың, яҙыусы Иҙрис Ноғомановтың ҡурай моңдары һәр кемдең күңеленә үтеп инде.

**Зөлфиә ЗАҺИТОВА.**